*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# Көнъелдә ҡалған әңгәмә

*В знании величие и краса,*
*Знание дороже, чем клад жемчужин:*
*Время любой уничтожает клад,*
*Мудрый и знающий вечно нужен.*
*Ас-Самарканди*

Ҡыҙыҡ бит донъя! Ҡан тартмаһа, йән тарта тигәндәй, тормош иҫ киткес кешеләр менән осраштыра: уларҙы онотоу мөмкин түгел. Шундай шәхестәрҙең береһе — билдәле төркиәтсе, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин. Уның хаҡында яҙыу теләге күңелемде өйкәп тик йөрөнө, әммә батырлығым етмәй, талантым да самалы һымаҡ. Улайһа, “Ватандаш” журналы редакцияһында эшләгәндә, йыш ҡына Фәндәр академияһына барып йөрөнөм үҙем. Һәр барғанымда Зиннур Ғәзиз улының ҡолас йәйеп иҫәнләшеп, күптәнге туғанын күргәндәй, ишек асып кабинетына саҡырғанын онотоп буламы һуң! Ниндәйҙер бер бик оло конференция тамамланған мәлгә тура килдем: ҙур табын йыйғандар, ҡунаҡтар таралған. Зиннур ағай минең коридор буйлап китеп барғанды күреп ҡалды ла, ғәҙәтенсә саҡырып алды. “Әйҙә, һылыу, икәүләп ултырып һыйланайыҡ әле”, — тине. Мин һүҙһеҙ ҡалдым. Нисек инде, шундай ҙур кеше менән табын артында икәүҙән-икәү ултырмаҡ кәрәк!? Шаңҡып торғанымды абайлап: “Тартынма, ағайыңды һанға һуҡмаҫҡа итәһең әллә?” — тигәс, ғәйепле уҡыусы төҫөндә өҫтәл артына ситләтеп кенә барып ултырҙым. Эй, һыйларға тотондо был, әйтерһең мин оло юлдан асығып килеп сыҡҡанмын. Фәндәр академияһы эше хаҡында һөйләшә генә башлағайныҡ, бер хеҙмәткәре хәбәребеҙҙе бүлде, әңгәмәбеҙ өҙөлдө. Ҡалған эшкә ҡар яуыуы шулдыр инде. Күпме тапаным ошо юлды, инде ҡаптым тигәндә, тағы һөйләшә алманыҡ. Йылдар үткән һайын, яҡташ күреп, ниндәйҙер уй-фекерҙәрен әйтергә теләгән һымаҡ күренә миңә хәҙер. Үҙемде әңгәмәләшергә әҙерлекһеҙ тойоуым, әҙерәк тартыныуым арҡаһында ҡайтып киттем. Ағайҙы нисә сәғәт булһа ла көтөп ултырһам, ни була инде! Көтмәнем, киттем бит, ҡамасаулап йөрөмәйем, тип уйланым.

Беҙ университетта уҡып бөтөп, яңы ҡуҙ асылып эшләп йөрөгәндә, Зиннур Ғәзиз улы 1975 йылда докторлыҡ диссертацияһы яҡлағайны инде. Лаборанттан башлап директор вазифаһына тиклем үҫкән кеше. Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы (1992), БАССР (1982) һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре (1996), профессор, яҙыусы, әллә күпме (һанай башлаһаң, үҙенә бер китап яҙырлыҡ) йәмәғәтселек эшендә ҡатнашҡан билдәле шәхес. Иң ғәжәбе, ул һәр ваҡыт көләс, асыҡ йөҙлө, көр тауышлы, йәше-ҡартына иғтибарлы була белде.

Зиннур ағай Ырымбур өлкәһенең Төйлөгән районы Мәкҫүт ауылында тыуған. Минең тыуған ауылым Юлдаш Ырымбурға сиктәш ята, ата-бабалар ере шунда ҡалған. Ошо яҡынлыҡтанмы, миңә "һылыу" тип өндәште, бер ваҡытта ла исем-шәрифем менән һүҙ ҡушманы. Күршелекте файҙаланып булһа ла, әңгәмә ҡорһам булыр ине лә. Әҙерәк үҙемде күрһәтәйем, тигән булдым. Уғаса хаҡлы ялға сығыу ваҡыты килеп тә етте. Ярай, өйҙә ултырғанда ваҡыт табырмын, тинем. Ирем мине ҡалдырып киткәс, ҡайғы-хәсрәт эсендә ваҡыт һыу кеүек аҡҡан. Шаңҡып йөрөп, туғыҙ йылдың үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын.

Бер мәл иремдең архивынан Зиннур Ғәзиз улының "Салауаттың йәше" романы тураһындағы бер битлек тос ҡына фекере яҙылған "Киң планлы тарихи роман" тигән ҡулъяҙмаһы килеп сыҡты. Унда былай тип яҙылғайны:

"Аҫылғужа Баһумановтың "Ағиҙел"дә баҫылып сыҡҡан "Салауаттың йәше" исемле романын тәүҙә теләмәйерәк кенә уҡый башлағайным, бара-бара журналдың сираттағы һанын көтөп алыр булып киттем.

Ысын тарихи роман был. Бик киң ҡоласлы эпик роман. Шул дәүерҙең тын алышы, рухы бирелгән. Автор бик күп тарихи материал уҡыған, мәғлүмәт туплаған. Ваҡиғалар Салауат тирәһендә генә бармай. Петербургка, Екатерина II, ғалим Паллас сәйәхәтенә күсеп китә. Емельян Пугачевтың ихтилалға килеп инеү ваҡиғалары ла тасуирлана. Тарихи шәхестәрҙең образдары ла бик баҙыҡ бирелгән. Салауат Юлаев образы ла ышандырырлыҡ һүрәтләнгән.

Теле бик матур, бик бай, тарихилыҡ тыуҙырам тип, иҫке һүҙҙәр менән дә артыҡ мауыҡмаған яҙыусы. Шулай ҙа бер һүҙе тураһында һораным Аҫылғужанан. Бер урында ул, боронғо төркиҙәр ҡыпсаҡтарҙы "шөршөт" тип атаған, тигән. Был һүҙҙең вариантын мин малай саҡта бер ҡыҙҙың ауыҙынан ишеткәйнем, үҙе һөйһөнмәгән егетте ул "сөрсөт" тип әрләне. Аҫылғужа был һүҙҙең тарихи сығанағы барлығын әйтте.

Эйе, тел менән бик һаҡ, белеп эш иткән әҙип ине ул. Быға уның әҫәре менән таныш һәр уҡыусы ышаныр.

Минең уйымса, романдың икенсе, өсөнсө киҫәге лә уйланылған булырға тейеш. Ҡыҙғаныс, авторҙың уға ҡулы теймәне.

19 октябрь 2005 йыл".

Мин ҡулъяҙманы киңәйтергә теләп, кис өйҙәренә шылтыраттым. Телефонды Венера еңгә алды. Хәл-әхүәл һорашырға ла онотоп, үҙ йомошомдо белдерҙем. Еңгә яғымлы тауышы менән: "Булдыра алмаҫ, ағайың бик ныҡ ауырый", — тине. Тағы телде тешләнем, әммә, нисек бар, шулай Зиннур ағайҙың фекерен ирем тураһындағы иҫтәлек китабына индерҙем.

Аҫылғужа менән Зиннур ағай фекерҙәш булдылар, һүҙ, уның мәғәнәһе һәм һөйләм тураһында ҡайҙа ла һөйләшәләр. Яҙыусыларҙың юбилей кисәләрендә Зиннур ағай әллә ҡайҙан кешене күреп, бер кемде лә көтөп тормай, янына үҙе етеҙ килеп күрешә, хәбәрен һөйләй, нимәнелер ентекле һораша ла шундай уҡ етеҙлектә китеп тә бара. "Мөхәммәт тауға бармаһа, тау үҙе Мөхәммәткә килә" тигән әйтем тап Зиннур ағай хаҡында әйтелгән кеүек. Моғайын, ул бер кисәлә

бөтә күрер кешеләре менән күрешеп, фекерләшеп өлгөрәләр, тип уйлайым. Ураҡсиндың 1966 йылда баҫылған “Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге” китабын ирем студент ваҡытта уҡ һатып алды. “Тел белгестәренә генә түгел, әҙ-мәҙ ҡәләм тибрәткән беҙгә лә уның файҙаһы ҙур”, — тип ҡабатларға һәм унда ике мең самаһы синоним ингәнен һыҙыҡ өҫтөнә алырға яратты. “Бына бит беҙҙең башҡорт теленең һүҙ байлығы ҡайҙа, тасуирлау мөмкинлеге һуң, ә һүрәтләү сараларының күп төрлөлөгө, нескәлектәре!..” — тип һоҡланды. Артабан да Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты сығарған һүҙлектәрҙе эҙләп йөрөп һатып алыр ине лә, һәр һүҙҙе, уның мәғәнәһен тикшереп сығып, Зиннур ағайға мотлаҡ үҙ фекерен еткерә торғайны. Аҫылғужа башҡорт телен яҡшы белде, шуға күрә һүҙлеккә инмәгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙе мотлаҡ китап бите ситенә теркәп ҡуйҙы.

Мин Аҫылғужа Баһумановтың ҡатыны булғанға күрә, ағай миңә шундай йылы мөнәсәбәт күрһәтәлер тигән фекерҙә йәшәнем. Ауылға ҡайта-китә йөрөй торғас, Һәйет ауылы янынан үткәндә, ирем: “Бында академик Зиннур ағай Ураҡсин, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, балалар уҡытып киткән”, — тигәйне. Ғөмүмән, Аҫылғужа минең районда булған, эшләп киткән йәки миңә ниндәйҙер туғанлығы-танышлығы булған кешеләрҙе үҙемдән алда ишетә, күрешә, яҡындан таныша торғайны. Зиннур ағай менән дә шулай килеп сыҡты. Мин, Күйөргәҙе районы Таймаҫ урта мәктәбендә уҡығас, Әҙриә апайым Федоровка районының “К Победе” гәзитен даими алдырһа ла, унда Ураҡсиндың журналист булғаны миңә мәғлүм түгел ине. Аҫылғужа аша белдем.

Зиннур ағай менән Аҫылғужаның ҡайһы бер эш алымдары ла оҡшаш. Мәҫәлән, үҙгәртеп ҡороу осоронда, төрлө болғаныштарға иғтибар итмәй, Зиннур Ғәзиз улы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтын Рәсәй Фәндәр академияһы составында һаҡлап алып ҡалды. Аҫылғужалар Динис ағай Бүләков етәкселегендә Башҡортостан Яҙыусылар союзын айырыуға бирмәнеләр, аҙаҡ Аҫылғужа “Китап” нәшриәте директоры булғас, нәшриәтте тарҡалыуҙан ҡотҡарҙы.

Туҡһанынсы йылдар башында “Народы России: возрождение и развитие народов и наций” тигән федераль программа эшкәртеү өсөн тәҡдим ителгәйне. Зиннур ағай төҙөгән Башҡортостан халыҡтары бүлеге аҙаҡ Урал халыҡтары бүлеге булып айырылып сыҡты. Был программаға ярашлы мин дә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханабыҙҙа халыҡтар әҙәбиәте бүлеге ойоштороп маташтым, аҙаҡ ул ҡала китапханаһы статусын алды. Минең менән бергә эшләгән Альбина Ғайсина “Башҡортостан халыҡтары” тигән библиографик күрһәткес нәшер итте. 1994 йылдан башлап “Указатель литературы о башкирах” тигән белешмә китап баҫтырып сығара башланым, уның 2-се киҫәге — 1997 йылда, 3-сөһө 2001 йылда донъя күрҙе.

Аҫылғужа Башҡортостан халыҡтарынан бер татарҙарға ғына нәшриәттә бүлек асырға теләмәне, уның кәрәге лә юҡ ине. Телдәр яҡын, талмас талап ителмәне. Килешеү нигеҙендә Башҡортостан яҙыусыларының әҫәрҙәрен күрше нәшриәттәрҙә баҫыу, уларҙыҡын башҡорт телендә беҙҙә нәшер итеүҙе файҙалы һананы. Ҡыҙғаныска ҡаршы, был эш тейешенсә тормошҡа ашманы.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Зиннур ағай тырышлығы менән 1992 йылда асылған энциклопедия бүлеге Салауат Юлаевтың шәхси энциклопедияһын төҙөй башланы. Библиография өлөшөн төҙөүгә мине лә алдылар. Ул бик ҙур яуаплылыҡ талап итте. Ә институт директоры Ураҡсин ғалимдар туплау, етәксеһен табыу, ғилми концепцияһын эшләү, финанс мәсьәләһен хәл итеү, Мәскәү редакторҙары менән һөйләшеү, китапты баҫтырыу кеүек ауыр бурыстарҙы еңеп сыҡты. “Салауат Юлаев” энциклопедияһы (төҙөүсеһе И.М.Гвоздикова, баш мөхәррире И.Ғ.Илишев) 2004 йылда донъя күрҙе.

Аҫылғужа кеүек зыялы шәхестәребеҙ дәүләт теле өсөн көрәшеп, матбуғат баҫмаларында мәҡәләләр баҫтырғанда, Зиннур ағай һүҙлектәр төҙөү менән бер рәттән, лексик эштәрҙе автоматлаштырыу төркөмө ойошторғайны, 2002 йылда ул “Лингвистика һәм мәғлүмәт технологияһы лабораторияһы” исемен алды. Шулай итеп башҡорт теленең бөтә тел байлығы тупланған электрон база, Интернет селтәрендә портал булдырылып, шул нигеҙҙә уны дәүләт теле сифатында ҡабул итеү мөмкинлеге асылды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, нәшриәттә китаптарҙы компьютерлаштырыуға дәррәү ҡаршы төштөләр һәм ул эште ун йыллап тип әйтерлек тотҡарланылар. Хәҙер тотҡарлыҡ юҡ: электрон китаптар бүлеге эшләй.

Беҙ Зиннур Ураҡсин ойошторған Мәҙәниәт һәм педагогика бүлеге хеҙмәттәрен үҙ күҙебеҙ менән күрҙек. Улар Башҡортостан мәҙәниәте тарихын бик борондан өйрәнә башлап, мәктәптәрҙә “Башҡортостан мәҙәниәте” тигән дәрес үткәреүгә нигеҙ һалды. Аҫылғужа, теләктәшлек белдереп, тиҫтәгә яҡын мәктәптә ошо фәндән бушлай дәрес биреп йөрөнө.

Зиннур Ғәзиз улының эштәрен барлау ул етәкләгән осорҙағы Институт эшен теүәлләү менән бер. Ә быны үҙ ваҡытында директор ауыҙынан ишетмәгәс, һанап ҡына үтеү ҙә минең ҡулдан килер эш түгел. Мин ирем һәм үҙемә ҡағылғандарын ғына хәтергә алдым.

Зиннур ағайҙың ижады хаҡында фекер йөрөтөргә батырсылыҡ итмәйем, уны ғалимдарға ҡалдырам. Әммә уймаҡ хикәйәләре хаҡында бер теләгемде әйтеп үтәм. Улар телмәр үҫтереү өсөн ҡулай. Уймаҡ хикәйәләренең сюжеты, төйөнләнеүе, кульминацияһы һәм сиселеше бар, бик мәғәнәле һығымталар яһала. “Бер артист театры” тамашаһын ҡороп була, минеңсә. Үҙәк телевидение бер мимика, бер монолог өсөн дә тамаша ҡора ла баһа. Беҙ ҙә әҙәби әҫәрҙәрҙе пропагандалауҙы оҫта файҙаланһаҡ ине.

Хәҙер Аҫылғужа ла, Зиннур ағай ҙа гүр эйәләре. Әҙәм балаһының мәңге йәшәр сихри көстәре юҡ шул.

Ирем Сибайҙа эшләгән ваҡытта Зиннур ағайҙың ҡустыһы Урал Ураҡсин менән яҡындан танышып, өйҙәрендә ҡунаҡ булып йөрөгән. Ялға килгәндә, мине лә саҡырҙылар. Ошо осрашыуҙы хәтерләп, Урал Ғәзиз улы Өфөгә баш архитектор булып күскәс, мин уны эҙләп табып, интервью алдым. Ул “Ватандаш” журналында баҫылып сыҡты.

Хәтирәләр юҡ-юҡ та яңыра ла китә, күҙҙән йоҡо оса. Эшләнмәгән эш өсөн намыҫ ғазабы кисерәм. Ағайҙың һуңғы юлға киткәнен дә тойомлап, күрәһең, ыҙа сиккән күңелем. Бер көн иртән торғас та, Венера еңгәгә шыл-

тыратып, тағы теләгемдә белдерҙем. Еңгә: “Ҡил һуң, әле генә ағайыңдың йылын үткәрҙек”, — тине. Хоҙай ҡөҙрәтенә ышанмай ҡара шунан! Сығып ысҡындым.

Бына Венера еңгә менән уларҙың тормош ептәрен тағатып ултырабыҙ. Зиннур ағай донъяға килгәс, бер сиған: “Был балаң ғүмерле һәм ҙур ғилем эйәһе була”, — тип юраған. Бығаса балалары үлеп торған ата-әсәгә оло шатлыҡ, шунлыҡтан улар: “Өйгә нур керҙе”, — тигәндәр ҙә улдарына Зиннур тип исем биргәндәр. Яратып үҫтергән бала егет ҡорона баҫып, Күгәрсен районындағы Мораҡ педучилищеһына уҡырға ингән. “Һин бит математик, педучилищела башлыса филологтар әҙерләйҙәр”, — тигән үкенес белдергән уҡытыусыһы, әммә егет юлынан тайпылмай. Тырышып уҡый, стипендияһына әсәһенә тараҡ булһа ла алып ҡайтып бүләк итә, туғандарына үҙе төшөргән һүрәттәрен тарата. Венера еңгә Мораҡ педучилищеһында Зиннур ағайҙың ҡустыһы Мансур менән бер курста уҡыған икән. Урал Ғәзиз улы менән ата бер, әсә башҡа булһа ла, Зиннур ағай уның да уҡып кеше булыуы хаҡында хәстәрлек күргән, ғөмүмән, туғандарын ярҙамынан ташламаған. Венера еңгә Башҡорт дәүләт университетына беренсе курсҡа уҡырға төшкәс, уға тормошҡа сыға. Аҫылғужа менән минең кеүек, бер бүлмәлә ике йәш студент ғаиләһе йәшәгән, артабан, утын яғып, кеше фатирында торғандар. Зиннур ағайҙың саңғы шыуырға яратыуы, аш-һыу әҙерләүҙәге маһирлығы, кеше ижадына, һүҙгә иғтибарлылығы Аҫылғужаны хәтерләтә лә ҡуя. Зиннур Ғәзиз улы һәр ваҡыт йылмайып йөрөнө, тибеҙ, баҡтиһәң, беҙҙең кеүек, анонимка ҡорбаны ла булған икән. Көнләшеп, үҙенең көсө-аҡылы етмәүҙән интегеп, кеше күңелен бысратырға, йөҙөнә ҡара яғырға теләүселәр осрай шул әле беҙҙең арала.

Венера еңгә менән ҡасан танышҡанымды хәтерләмәйем. Уны мин бик күптәндән күргән-белгән кеүекмен. Әлеге йән тартҡан кешемдер ул, көньяҡ ҡыҙҙары бит беҙ. Телебеҙ ҙә, шөғөлөбөҙ ҙә бер тигән кеүек. Шәл бәйләп үҫкәнбеҙ. Заманында, баш ҡалала тәү башлап ҡала балалары өсөн башҡорт мәктәбе асылғас, Венера Заһит ҡыҙы ҡурҡмайынса башҡорт балаларын беренселәрҙән булып үҙ телендә уҡыта башлай. Ойоштороу осороноң, сәйәси ҡаршылыҡтың бөтә ауырлыҡтарын ата-әсәләр менән бергә кисерә. Айырым мәктәп төҙөлгәнсе, ҡаланың 91-се мәктәбендә беренсе класҡа 11 бала ҡабул итә. Артабан уҡыусылар һаны йыл һайын арта бара, яңы беренсе класты алырға икенсе уҡытыусылар өҫтәлә килә. Беҙҙең балалар уҡырға ингәндә еңгәбеҙ хаҡлы ялға киткәйне. Бына шул башҡорт мәктәбе астырабыҙ тигән төркөмдөң инициативаһын күтәреп алғанда ишетеп белгәнмендер кеүек Венера Заһит ҡыҙын. Нисек кенә булмаһын, бер юлдан йөрөгәнбеҙ.

Халҡымдың арҙаҡлы шәхестәре менән танышлығым, аралашыуым менән бәхетлемен. Уларҙың исемдәре рухи донъябыҙҙа, мәҙәниәтебеҙҙә, халҡыбыҙ күңелендә мәңгелеккә үҙ урынын алды.

Тауға ҡарап тау булып булмай, әлбиттә, әммә, тауҙың тартыу көсөнә күҙ терәп, ниндәйҙер бейеклектәр яуларға була. Шуның менән хозур һәм бөйөк бит тауҙар.